*Азамат МОРАТОВ,*
*Салауат ҡалаһы хакимиәтенең мәҙәниәт идаралығы начальнигы*

Социаль һәм иҡтисади үҙгәрештәр заманында Башҡортостан Республикаһы хөкүмәте унда йәшәгән халыҡтарҙың бай мәҙәни мираҫын һаҡлауҙы үҙенең дәүләт мәҙәни сәйәсәтенең төп бурысы тип иҫәпләй. Салауат ҡалаһының мәҙәниәт өлкәһе лә байтаҡ ҡыйынлыҡтар кисерҙе, әммә тупланған рухи - мәҙәни байлыҡ һаҡлап ҡалынды. Республикабыҙҙың үҙаллылығы иғлан ителеү һәм Башҡортостандың үҙаллы үҫеше төрлө көрсөк хәлдәрен тотҡарлауға булышлыҡ итте.

XXI быуатҡа Салауат ҡалаһы байтаҡ рухи-мәҙәни ҡаҙаныштар менән аяҡ баҫты. Дәүләт һәм муниципаль мәҙәниәт учреждениелары дәррәү эшләй, уларҙың матди-техник базаһы, әҙерлекле кадрҙары, иң мөһиме, үҙенсәлекле мәҙәни ҡаҙаныштар һаҡлап ҡалынды.



Әлеге ваҡытта ҡалала Салауат башҡорт дәүләт драма театры, М.В.Нестеров исемендәге дәүләт художество музейының филиалы, «Салауатнефтеоргсинтез» акционерҙар йәмғиәте профкомының «Нефтехимик», «Салауатстекло» акционерҙар йәмғиәтенең «Алмаз» мәҙәниәт һарайҙары, «Ағиҙел» милли мәҙәниәттәр һарайы муниципаль учреждениеһы эшләп килә. Балалар музыка

һәм художество мәктәптәре, музыка училищеһы ҡаланың мәҙәни тормошона тос өлөш индерә. 11 китапхананы берләштергән Үҙәк китапхана системаһы ҡалабыҙҙың белем һәм мәҙәни кимәлен күтәреүҙә ҙур роль уйнай.

Салауат башҡорт дәүләт драма театры иһә күптән ҡала халҡының ихтирамын яулаған. Ә художестволы үҙешмәкәрлек коллективтары иһә ҡала хеҙмәтсәндәренең күп яҡлы ижади мөмкинселектәрен асырға булышлыҡ итә. Әйтәйек, «Нефтехимик» мәҙәниәт һарайында 11 үҙешмәкәр коллективта йөҙләгән бала һәм үҫмер сәнғәт иленә тәүге аҙым яһай, 10 үҙешмәкәр коллектив «Халыҡ» йәки «Өлгөлө» ансамбль исемен йөрөтә.

«Нефтехимик» мәҙәниәт һарайының «Ағиҙел» халыҡ бейеүҙәре ансамбленең ойошторолоуына 35 йылдан артыҡ. Шуны ғына әйтеү ҙә етә: ансамблдә сығыш яһаған ете кеше «Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре» тигән абруйлы исемгә лайыҡ булған. «Ағиҙел» ансамбле Калининград ҡалаһында уҙған 15-се халыҡ-ара фестивалдә, Чебоксарҙа үткән «Волга буйы шишмәләре» Бөтә Рәсәй һәм Испанияла уҙғарылған фольклор фестивалдәрендә ҡатнашып лауреат булды һәм дипломдар яуланы.

Салауат ҡалаһында 66 китапхана булып, унда 2 миллион дананан ашыу китап иҫәпләнә, йәғни бер кешегә 8-9 дана китап тура килә. Шуны ла әйтергә кәрәк, 2000 йылда ҡала хакимиәте, Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы ярҙамы менән мәғлүмәт-китапхана эшен автоматлаштырыу буйынса маҡсатҡа ярашлы программа индерелде.

Ҡалала мәҙәниәт һәм сәнғәт өлкәһе өсөн кадрҙар әҙерләүгә лә ҙур иғтибар бирелә. Ул ике звенонан тора. Беренсеһенә балалар музыка һәм художество мәктәптәре ҡараһа, икенсеһен Салауат музыка училищеһы тәшкил итә. Әле был училищела өс бүлектә 277 студент белем ала.

Балалар художество мәктәбе иһә үҫмер быуында эстетик зауыҡ тәрбиәләүгә тос өлөш индерә. Ул йыл һайын Германияла уҙғарыла килгән Балалар һүрәттәре халыҡ-ара конкурсында ҡатнаша, Франция, Чехия, Һиндостан, Швейцария, Венгрия кеүек илдәрҙең дипломдарын да яуланы.

1952 йылда асылған Салауат балалар музыка мәктәбен 1722 уҡыусы тамамлаған һәм сәнғәт һуҡмағына баҫҡан.

М.В.Нестеров исемендәге дәүләт художество музейының Салауаттағы филиалында бик йыш ҡыҙыҡлы күргәҙмәләр ойоштторола. Башҡортостан рәссамдарының «Йыл миҙгелдәре» пейзаж күренештәре, СССР-ҙың халыҡ рәссамы, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Б.Ф.Домашниковтың «XVIII — XX быуат башында рус портреты» күргәҙмәһе, ҡалабыҙҙың абруйлы рәссамы, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Г.Н.Павловтың шәхси күргәҙмәһе, Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеүҙең ун йыллығына арналған күргәҙмәләр ҙур уңыш менән үтте.

Ҡалала милли-мәҙәни сәйәсәт тә әүҙем тормошҡа ашырыла. «Ураҙа байрамы», «Һабантуй», «Масленица» кеүек байрамдарҙы халыҡ күтәп ала. Милли-мәҙәни үҙәк башҡорт, рус, татар, немец һәм сыуаш мәҙәниәттәрен берләштерә. Милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тормошо һәм ижадына арналған байрам саралары ҙур ҡыҙыҡһыныу уята.

«Көмөш ҡыл» үҙешмәкәр йырҙар фестивале, «Һылыуҡай» конкурстары, «Ауырыу балаға ярҙам күрһәт» мәрхәмәтлек марафоны ла үҫмер быуындың мәҙәни үҫешенә ыңғай йоғонто яһай. Бына 10 йыл инде ҡалала «Яҙғы тамсылар» тип аталған төбәк-ара балалар ижады конкурстары үткәрелеп килә. «Шишмә» өлгөлө хореография коллективы уҙған йыл «Сулпылар» республика балалар телевизион конкурсында беренсе урынды яуланы.

Ҡыҫҡаһы, байтаҡ уңыштар яуланған, әммә эшләнәһе эштәр тағы ла күберәк.